Башҡортостан Республикаһы муниципаль районы

Илеш районының муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы Күктау урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| Ҡаралды | “Килешенде” | “Раҫлайым” |
| методик берлэшмэлэ | уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса | мәктәп директоры |
| Протокол № __ | директор урынбаҫары | _________./Сәдертдинов Ф.К../ |
| _________.2015й. | _________/Шәмсетдинова З.И./ | Приказ № ____ |
| | _______________2015й. | _______________ 2015й. |

# 2015-2016 уҡыу йылына башҡорт теле туңәрәге буйынса

# эш программаһы

*Башҡорт теле*

*Класс: 4*

*Дөйөм сәғәттәр һаны: 35*

*Аҙнаһына: 1 сәғәт*

*Программа: Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А., Вилданов Ә.Х. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн. / Ижевск, “Книгоград” нэшриәте, 2008.*

*Дәреслек: Толомбаев Х.А., Нәбиуллина М.М. Башҡорт теле. Рус мәктәптәренең 4-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн дәреслек. Өфө: “Китап”, 2010.*

*Уҡытыусы: Камалова Гөлнара Мәскүт  ҡыҙы*

*2015 йыл.*

## 1.Аңлатма яҙыу.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш программаһы 35 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 1 сәғәт).

**Дәреслек:** Толомбаев Х.А., Нәбиуллина М.М. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : “ Китап”, 2010.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:** Тикеев Д. С., Толомбаев Х. А., Вилданов Ә. Х. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр. – Өфө: Башҡортостан, 2010. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле буйынса берҙәм талаптар.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты : Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле:** Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө:” Китап”, 2010.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре: Тикеев Д. С., Толомбаев Х. А., Вилданов Ә. Х. ) – Өфө :” Китап”, 2010.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла**

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

- Телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу, телдең системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү, бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.
- Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
- Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Маҡсаттар һәм бурыстар.**

- Балаларҙың һүҙлек запасын арттырыу, шул һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен әүҙемләштереү.
- Грамматик материалды үҙләштереү, уны дөрөҫ файҙаланып, бәйләнешле һөйләү, яҙыу күнекмәләрен артабан үҫтереү.
- Республиканың тәбиғәте, халҡы, улар араһында башҡорттар, уларҙың тормошо, тарихы, хеҙмәте, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары.
- Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре тураһында белемдәрҙе киңәйтеү.
- Программала бирелгән шиғырҙарҙы ятлау, башҡортса йырҙар өйрәнеү һәм башҡарыу. Башҡортса телмәр төҙөү.

## 2.Уҡыу - укытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау.

Класта башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеш диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн укытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

## 3. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Мәктәп, Ватан .**

1 сентябрь – Белем байрамы. Ватан, мәктәп, уҡыу, уға мөнәсәбәт тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре (ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү) . Әҫәрҙең темаһы һәм төп фекере.

**Йәйге хәтирәләр .**

Башҡортостанда йәйге тәбиғәт, балаларҙың йәйге эштәре, ялы тураһында хикәйәләр, шиғырҙар, әкиәттәр, мәҡәләләр уҡыу һәм һөйләү. Темаға ҡарата һүрәттәр төшөрөү. Әңгәмәләр үткәреү.

Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең әйтелеше һәм яҙылышы

.

**Тәбиғәт бүләктәре .**

Матур әҙәбиәттә көҙҙөң сағылышы. Башҡортостанда көҙгө тәбиғәт, балаларҙың һәм ололарҙың көҙгө эштәре, көҙгө байлыҡ тураһында хикәйәләр, шиғырҙар, мәҡәләләр уҡыу һәм һөйләү. “Көҙ” темаһына ҡарата экскурсиялар ойоштороу, япраҡтарҙан коллекциялар әҙерләү, һүрәттәр төшөрөү, ижади эштәр күргәҙмәһе ойоштороу.

Ижек. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү.

**Илем тарихы – халҡым тарихы .**

Халҡыбыҙҙың ауыр үткәне, михнәтле тормошо, азатлыҡ өсөн көрәше, билдәле шәхестәре тураһында мәҡәләләр, хикәйәләр, шиғырҙар уҡыу һәм һөйләү. Гәзит һәм журналдарҙан темаға ярашлы материалдар йыйыу, альбом төҙөү.

Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше

**Тормош – ижад .**

Башҡорт халҡының талантлы ижад кешеләре тураһында уҡыу һәм һөйләү. Ижад төрҙәре менән таныштырыу. Ижад кешеләре тураһында ҡыҫҡаса белешмәләр төҙөү.

Ҡылым. Уның зат, һан, заман, барлыҡ һәм юҡлыҡ мәғәнәләре.

**Йәшәү – Ватанға хеҙмәт итеү .**

Илебеҙ халыҡтарының хеҙмәте, бөгөнгө көн геройҙары, уларҙың Тыуған илгә, хеҙмәткә, уҡыуға ҡарашы; балаларҙың хеҙмәте тураһында әҫәрҙәр уҡыу. Данлы кешеләр менән осрашыу, әңгәмәләр үткәреү, уҡылған әҫәрҙәр буйынса һүрәттәр төшөрөү.

Һан. Һандарҙың яһалышы.

**Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә .**

Кешенең яҡшы һәм насар сифаттары тураһында әкиәттәр уҡыу, йомаҡтар ҡойоу, мәҡәлдәр, көләмәстәр менән эште дауам итеү. Шуларға нигеҙләнеп, һығымталар яһарға өйрәтеү, яҡшы сифаттар тәрбиәләү. Әкиәттәр буйынса инценировкалар төҙөү һәм сығыш яһау, әкиәттәргә, йомаҡтарға, мәҡәлдәргә бағышланған иртәлектәр ойоштороу.

Рәүеш дәрәжәләре

**Бурай-бурай ҡарҙар яуа .**

Башҡортостанда ҡыш, уның билдәләре. Ололарҙың һәм балаларҙың ҡышҡы эштәре, уйындары; ҡышҡы байрамдар тураһында мәҡәләләр, хикәйәләр, шиғырҙар уҡыу һәм һөйләү. Ҡышҡы тәбиғәткә экскурсия ойоштороу, альбомдар әҙерләү, һүрәттәр төшөрөү. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Ымлыҡтар. Уларҙың мәғәнәләре һәм телмәрҙәге роле

**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ .**

Тыныслыҡ, халыҡтар араһында дуҫлыҡ, үҙ-ара ярҙам, берҙәмлек тураһында шиғырҙар, мәҡәләләр, хикәйәләр уҡыу һәм һөйләү. “Илебеҙ тыныс булһын” темаһына альбом төҙөү.

Һөйләм. Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр

**Сәсәндәрҙән һүҙ ҡалыр .**

Сәсәндәр тураһында белешмә. Күренекле сәсәндәрҙең тормошо һәм ижады. Балаларҙың сәсәнлек ижады.

Интонация буйынса һөйләм төрҙәре

**Балдай татлы һыуҙарым .**

Башҡортостандың йылғалары һәм күлдәре тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм һөйләү. Тыуған төйәктәге йылға, күлдәр, шишмәләр тураһында альбом әҙерләү, һүрәттәр төшөрөү.

Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр.

**Башҡортостан ҡалалары .**

Башҡортостандың ҡалалары тураһында әҫәрҙәр уҡыу, белешмәләр алыу һәм һөйләү. Башҡортостан ҡалаларына арнап альбомдар төҙөү, стендтар эшләү.

Һөйләм киҫәктәре.

**8 март – ҡатын-ҡыҙҙар көнө .**

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың данлы эштәре, яҡшы сифаттары, уҡыусы ҡыҙҙар тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм һөйләү. “8 март – әсәйҙәр байрамы” темаһына иртәлек ойоштороу, данлы ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашыуҙар ойоштороу.

Ябай һөйләм.

**Башҡортостан мәҙәниәте .**

Башҡортостандың мәҙәниәте, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм һөйләү. Башҡортостандың яҙыусыларына, композиторҙарына, артистарына бағышлап альбомдар төҙөү, улар менән осрашыуҙар үткәреү.

Ҡушма һөйләм**.**

**Тәбиғәттең теле асылған саҡ .**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре; ололарҙың һәм балаларҙың яҙғы эштәре; ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм һөйләү. “Яҙғы моңдар” темаһына әҙәби монтаж әҙерләү һәм сығыш яһау. Тәбиғәткә экскурсия, шуның буйынса әңгәмәләр үткәреү, һүрәттәр төшөрөү.

Һөйләм. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр.

**Кеше – кеше булһын .**

Кешеләрҙең һәйбәт һәм яман сифаттары, тәрбиәлелек, кешеләргә һәм тәбиғәткә яҡшы мөнәсәбәт тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм һөйләү. “Кеше һәр яҡтан да камил булырға тейеш” тигән темаға альбом төҙөү, әңгәмәләр үткәреү.

Һөйләм темаһы.

**Яҙ һәм хеҙмәт байрамы .**

Беренсе Май – дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек көнө. Халыҡтарҙың дуҫлыҡҡа ынтылышы. “Беренсе Май” темаһына әҙәби монтаж, сығыш яһау.

Һөйләмдә һүҙҙәрҙең урынлашыу тәртибе.

.

**Һаумы, йәмле йәй .**

Йәйге күренештәр; уҡыу йылының һөҙөмтәләре; йәйге эштәр; йәйгә план-хыялдар хаҡында әҫәрҙәр уҡыу һәм һөйләү. Тәбиғәткә экскурсия, унын һөҙөмтәләре буйынса әңгәмәләр үткәреү.

Башҡорт теле буйынса бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау, йомғаҡлау.

## 4. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

## Телмәр күнекмәләре

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү:

- текстың планын төҙөү;
- текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү, билдәле ситуацияла тексты ижади дауам итеү.

2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү:

- ҡараған фильм, картина, ишеткәндәр, бирелгән ситуация буйынса хикәйә төҙөп һөйләү;
- ваҡиғаға, геройҙарҙың эштәренә, ҡылыҡтарына баһа биреү, үҙ фекеңде иҫбатлау;
- тестағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү-тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;
- 10-12 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белеү.

3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу:

- тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
- гәзит-журналдарҙан, китаптарҙан материал йыйып, хикәйә төҙөү;
- әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.

4. Хәрефтәрҙе дөрөҫ һәм матур яҙыу, дөрөҫ тоташтырыу:

- Иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.

5. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү;

-һөйләмдәр төҙөү;

-һүҙлек менән эш;

-һүрәтләү иншаһы;

-слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләм…

## 6. IV класс уҡыусыларының белем кимәленә талаптар.

- «Башҡортостан » темаһы буйынса (тәбиғәте, халҡы, уның тормошо, ҡалалары, йылға- к-лдәре, кейем- һалымы, ижады ) тураһында әңгәмәлә ҡатнашыу, һөйләү**.**
- Тәҡдим ителгән ситуация буйынса һораућар бирә белеү, уҡытыусының (йәки башҡаларҙың) һораућарына яуап бирә белеү; яуаптарҙы дөрөҫ интонация менән асыҡ, аңлайышлы итеп әйтеү, һөйләү.
- Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.
- Ҡысҡырып шыма һәм тасуири уҡыу.
- Һүҙлек һүҙҙәрен белеү һәм уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
- Дәрестә өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү.
- Программала күрһәтелгән шиғырҙарҙы яттан белеү; 3-4 башҡорт йырын башҡара белеү, мәктәптең үҙешмәкәр сараларында ҡатнашыу, сәхнәлә сығыш яһау. Бөтә был эштәр тураһында бәйләнешле һөйләй белеү.

## 7. Материаль – техник ҡулланмалар.

телевизор
компьютер

## 8. Тематик план.

| № | Тема | Телмәр үҫтереү | Һүҙлек һүҙҙәре | Йыһазландырыу | Көн | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | План-н | Үткәрел гән |
| **Мәктәп, Ватан** | | | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. | ***К. Кинйәбулатова. Белем көнө.***<br><br>М. Кәрим “Ватан”<br><br>***Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.*** | Уҡыу, һөйләү, ятларға әҙерләнеү<br><br>Һорауҙарға телдән яуап биреү | Ғәжәп, сабый, ҡупшы, ғәзиз<br><br>Донъя, дан тотоу, шишмә, хазига, фиҙаҡәр, аҫыл<br><br>Ватан, Башҡортостан | Һүрәттәр<br><br>Һүҙҙәрҙе алфавит тәртибендә яҙырға . | 1.09 | |
| **Йәйге хәтирәләр** | | | | | | |
| 2. | ***Ғ. Сәләм. Республика иртәһе.***<br><br>Р. Бикбаев “ Ҡолон кеүек” .<br><br>Н. Мусин “ Мәңге йәшеллек”<br><br>М. Хисмәтуллин”Бесәй китте еләккә”<br><br>Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең әйтелеше һәм яҙылышы | Тасуири уҡырға өйрәнеү, ятларға әҙерләнеү,һорауҙарға яуап алыу<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | Тын, өрөп, әүен, ҡабат<br><br>Тояҡ, еҫ, йәйғор, тәмле<br>Әүәл,ҡөҙрәт, ожмах. | Һүрәттәр | 8.09 | |
| **Тәбиғәт бүләктәре** | | | | | | |
| 3-4 | ***Д. Юлтый. Көҙ .***<br><br>И. Насыри “ Ҡараңғы төн ҡосағында”<br><br>Ижек. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. | Тасуири уҡырға өйрәнеү, ятларға әҙерләнеү,һорауҙарға яуап алыу<br><br>Һорауҙарға яуап алыу. | Монар, ҡырау, т-бән, һүрән<br>Ярыҡ, күшегеү, буҫ | Һүрәттәр | 15.09<br><br>22.09 | |
| 5 | Х. Кәрим “ Көҙгө картиналар “ | | Тәңкә, ҡурғаш, күгелйем, гәрәбә | | 29.09 | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Уртаҡлыҡ ,яңғыҙлыҡ исемдәр. . Исемдәрҙең эйәлек зат | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү.<br><br>Телдән хикәйә төҙөү | Ябалаҡлап, ҡар тотоу, мәғәнә | | | |
| **Илем тарихы – халҡым тарихы** | | | | | | |
| 6 | Ғ. Хөсәйенов. Алдар батыр" әҫәрендә Алдар батыр образы..<br><br>Азатлыҡ өсөн көрәш.<br><br>Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү<br><br>Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү | Тыуған төйәк, яу, йәһәт, сым, баһадир<br><br>Олоҫ, аяуһыҙ, ихтилал, ярандир | | 6.10 | |
| 7 | Я. Хамматов. Ҡаһым түрә. Хикәйәлә башҡорт яуғирҙарының батырлығы.<br>Килештәр менән үҙгәргәндә ҡуш тартынҡыға бөткән һүҙҙәр | Тасуири уҡыу, һорауҙарға яуап алыу<br>Һорауҙарға яуап алыу.<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | Кантон, вәғәҙә, фарман, татлы | | 13.10 | |
| 8 | Я. Хамматов "Аманат"<br><br>Сифат. Сифаттың һөйләмдәге мәғән | | Аманат | | 20.10 | |
| 9 | Б. Рафиҡов. "Ярлыҡ ҡағыҙы" әҫәрендә ireклек темаһы<br><br>Сифат дәрәжәләре. | | Ҡумта, мөйөш, дәһшәтле, ғәҙеллек, мәмерйә | | 27.10 | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 | З.Биишева “Кәмһетелгәндәр”<br><br>Ҡылым. Ҡылымдың һан, зат менән үҙгәреше. | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү | Табаҡ, яҙмыш, ҡарындыҡ, тай, томра | Китаптар күргәҙмәһе | 1011 | |
| 11 | Д. Юлтый “ Бәләкәс көрөшсе “<br><br>Ҡылымдың заман мәғәнәләре. | Мәҡәләнең йөкмәткеһен үҙләштереү.<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | | һүрәттәр | 17.11 | |
| | | **Тормош – ижад** | | | | |
| 12-13 | Мәшһүр ҡурайсы Азат Айытҡолов ижады<br><br>Башҡорт сәхнәһенең ынйыһы – Рәшиҙә Туйсинаның ижады<br><br>Ҡылым. Уның зат, һан, заман, барлыҡ һәм юҡлыҡ мәғәнәләре. | Мәҡәләнең йөкмәткеһен үҙләштереү<br>Һорауҙарға яуап алыу. | Дан ҡаҙанған, көй, тауыш | | 24.11<br><br>1.12 | |
| 15 | М. Кәрим. “Бөжәк апа” Һан. Һандарҙың яһалышы. | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү.<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | Сибек, сираҡ, зыян, сиңерткә, сибәр | | 8.12 | |
| 16 | Е.Кучеров. Башҡортостанда иҫтәлекле урындар<br><br>Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү | | Плакаттар, һүрәттәр | 15.12 | |
| 17 | Д. Бүләков “ Һәйкәл”<br><br>Алмаш. Алмаш төркөмсәләре. | Һорауҙарға яуап алыу. | | | 22.12 | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **Йәшәү – Ватанға хеҙмәт итеү** | | | | | | |
| 18 | Ғ.Дәүләтов. Яңы һыу һаҡлағыс”<br><br>Алмаштарҙың һан, килеш менән үҙгәреше. | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү | Һыу һаҡлағыс, диңгеҙ, ҡасаба, бәһлеүән | | 29.12 | |
| 19 | С. Солтангәрәев “ Ҡараболаҡ тарлауығында”<br>Рәүеш. Рәүеш аңлатҡан мәғәнәләр | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү<br>Телдән хикәйә төҙөү. | Дауыл, тарлауыҡ, ғәрәсәт | | 19.01 | |
| **Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә** | | | | | | |
| 20 | “Ирәндек “әкиәте.<br><br>Рәүеш дәрәжәләре**.** | бүлектәргә бүлергә, йөкмәткеһен һөйләргә. | Ялсы, кесерткән, быҙау, тире, йәһәт | Һүрәттәр | 26.01 | |
| 21 | Ж.Кейекбаев “ Терпе менән йылан араһында алыш”<br><br>Рәүештәрҙең яһалышы. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы. | Һорауҙарға яуап бирергә<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | Лапы, ағыу, аса, йәнә | | 2.02 | |
| 22 | ***Йомаҡтар.***<br><br>***Мәҡәлдәр.***<br><br>Тиҙәйткестәр. | Уҡыу, һөйләү, ятларға әҙерләнеү | | | 9.02 | |
| 23 | “Алдар менән хан” әкиәте.<br><br>Теркәүестәрҙең төркөмсәләре. | Тасуири уҡыу, һорауҙарға яуап алыу | | | 16.02 | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **Бурай- бурай ҡарҙар яуа.** | | | | | | |
| 24 | ***Н.Нәжми. Ҡыш.***<br><br>Ымлыҡтар. Уларҙың мәғәнәләре һәм телмәрҙәге роле. | Тасуири уҡырға өйрәнеү, ятларға әҙерләнеү.<br><br>Һорауҙарға яуап алыу.<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | Юрған, маһайып, ҡабат | | 23.02 | |
| 25 | Ф.Иҫәнғолов “ Урман һаҡсылары.” | | Йылдам, сәңгелдәк, аслыҡ | | 1.03 | |
| 26 | З.Хисмәтуллин “ Тәүәккәллек”<br><br>Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы. | | Шәфҡәтһеҙ, көртмәле – черника, кеҫә | | 8.03 | |
| | | **Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ** | | | | |
| 27 | Күрәҙәсе хикәйәһендә Фәрит ағайҙың сере.<br><br>М.Кәрим. Бергә ғүмергә әҫәрендә халыҡтар дуҫлығы һүрәтләнеше.<br><br>Һөйләм. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр | Тасуири уҡырға өйрәнеү, ятларға әҙерләнеү | Ыңғай, ыҫпай<br><br>Йыйын,яр | | 15.03 | |
| 28 | Й.Солтанов. Ҡурай моңо. Әҫәрҙә халыҡ – ара аралашыу<br><br>Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | Хикәйә буйынса план төҙөргә, һорауҙарға яуап<br><br>Һорауҙарға яуап алыу. | Көпшә, тарих, бәке, илһам, сын | | 22.03 | |
| **Сәсәндәрҙән һүҙ ҡалыр** | | | | | | |
| 29 | | Тасуири уҡыу, һорауҙарға яуап | Сәсән, тәрбиәсе, мираҫ, фәһем, | | 5.04 | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | **Б. Байымов. Сәсәндәр. Сәсәндәр һәм халҡыбыҙҙың героик тарихы**<br>З. Биишева “ Халыҡ сәсәне, ғалим һәм яҙыусы Мөхөмәтшә Буранғолов”<br>Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. | алыу<br>Телдән хикәйә төҙөү. | аҡын<br>Ғалим, йола, алҡыштар, сәхнә | | | |
| **Балдай татлы һыуҙарым** | | | | | | |
| 30. | С.Ағиш. “Ҡариҙел”<br>З.Биишева. “Талҡаҫ күле”.<br>Асылыкүл. Күлдең тасуирланышы.<br>Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. | Тасуири уҡыу, һорауҙарға яуап алыу.<br>Телдән хикәйә төҙөү. | Эш аралаш, мәғдән, мүк, суртан, тәрән<br>Киңлек, тәрәнлек,оҙонлоҡ | | 12.04 | |
| **Башҡортостан ҡалалары** | | | | | | |
| 31. | Башҡортостан ҡалалары ни һөйләй. Ҡалаларҙың матурлығы һәм ҡеүәте.<br>М.Кәримов. Күмерселәр ҡалаһы. Ҡаланың данлы тарихы.<br>Һөйләм киҫәктәре. | Телдән хикәйә төҙөү. | Уландар, сос, мәкер | | 19.04 | |
| **Һигеҙенсе Март – ҡатын – ҡыҙҙар көнө** | | | | | | |
| 32 | ***З.Биишева . Хөйерле көн.*** | Уҡыу, һөйләү, | | Һүрәттәр | 26.04 | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Шиғырҙа кешелеклек темаһы<br>Д.Бүләков. Күстәнәс. Голнара, Сәғүрә, Зәлифә образдарына характеристика.<br><br>Ябай һөйләм. | ятларға әҙерләнеү<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | | | | |
| **Башҡортостандың мәҙәниәте** | | | | | | |
| 33. | З.Биишева. Һөнәрсе менән Өйрәнсек. Хикәйәттең төп фекере<br><br>Ҡушма һөйләм. | Тасуири уҡыу, әҫәрҙең эстәлеген үҙләштереү | Ҡая, тау, табыш, үңәс, йоҡа, туҙбаш йылан | Һүрәттәр | 3.05 | |
| **Яҙ һәм хеҙмәт байрамы** | | | | | | |
| 34. | Г.Юнысова “Тәбиғәтте шулай яраталармы?”<br><br>Хаталар өҫтөндә эш. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең урынлашыу тәртибе. | Һорауҙарға яуап алыу.<br><br>Телдән хикәйә төҙөү. | Яр, сиктән тыш, муйыл, уянды | | 10.05 | |
| **Һаумы, йәмле йәй.** | | | | | | |
| 35. | ***Г.Юнысова. Һау бул, мәктәп.*** Уҡыу йылының һөҙөмтәләре, йәйгә план – хыялдар темаһы | Тасуири уҡырға өйрәнеү, ятларға әҙерләнеү | Ял, ең һыҙғанып | | 17.05 | |

## 9.Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт.

Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : « Китап», 2010.

Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса укыйым – Өфө: Китап, 2007.
Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».
Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
Башҡорт теленән изложение текстары йыйынтығы. 1- 4 - се класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма– Өфө :
М. Ғ. Усманова. Башҡортса русса – синонимдар һүҙлеге. Өфө : Китап, 2010.
Ураҡсин З. Ғ., Сиразетдинов З. Ә., Суфьянова Н. Ф. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.: Башланғыс синыф уҡыусылары өсөн. — Өфө : Китап, 2005.
Саяхова Л. Г., Ураксин З. Г., Хасанова Д. М. Русско — башкирский иллюстрированный тематический словарь. Уфа: Китап, 1998.